*Закир ЗИННӘТУЛЛИН*

# Ҡырымда ла башҡорт бар

**Ҡырым Республикаһы татарҙары һәм башҡорттары федерацияһы 2001 йылдың апрелендә ойошторолдо. Федерация Бөтә донъя татар конгресы һәм Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының ассоциатив ағзаһы булып тора. Рәйесе — Марат Мозаһит улы Мәсәлимов. Ойошма айына бер тапҡыр ”Ҡурай” исемле гәзит сығара (рус телендә). Федерация эргәһендә ”Йәшлек” татар һәм башҡорт йәштәре берлеге эшләп килә, уның етәксеһе Лилиана Хруслова. Ойошмалар Симферополь ҡалаһында урынлашҡан**.

Бөгөнгө көндә Ҡырымда 1 меңдән ашыу башҡорт йәшәй (Украинала бөтәһе 4500 кеше), татарҙар 18 мең тәшкил итә (Украинала бөтәһе 75 мең). Уларҙың күпселеге Симферополдә, Бахчисарай, Червоногвардейский райондарында көн күрә. Татарҙарға килгәндә, бында, әлбиттә, ”ҡазанлылар”, йәғни ҡазан татарҙары тип йөрөтөлгән диаспора күҙ уңында тотола.

Бындағы төп милләт — ҡырым татарҙары үҙҙәре 300 меңдән ашыу. Бөтә донъяла уларҙың һаны 6 миллион кеше тәшкил итеп, иң ҙур диаспоралары Ҡаҙағстанда һәм Урта Азияла, Төркиәлә, Көнбайыш Европа илдәрендә (нигеҙҙә Германияла) һәм АҠШ-та төпләнгән. Хәҙерге көндә ҡырым татарҙары күпләп иленә ҡайта һәм уларҙың һаны 1 миллиондан артыуы көтөлә. Әлбиттә, Көнбайышта йәшәгәндәргә иҫәп тотоп булмай, ә бына Ҡаҙағстан менән Урта Азия республикаларындағылар унда ҡалырға теләмәй.

Ҡайһы берәүҙәр ҡырым татарҙарын төрөктәргә яҡын, тип иҫәпләй, әммә улар үҙҙәре лә, белгестәр ҙә улай тиңләүгә ҡаршы сыға. Ҡырым татарҙары төрки халыҡтарҙың уғыҙ төркөмөнә ҡарай. Заманында улар ҡараимдар һәм ғағауздар менән уртаҡ этник төркөм тәшкил иткән, шул уҡ төркөмгә бөгөн Кавказда йәшәүсе ҡайһы бер төрки халыҡтары ла ингән тип иҫәпләнә (ҡарасәйҙәр, балҡарҙар һ.б.).

Башҡорттар һәм ҡазан татарҙары Ҡырымға XIX быуат аҙағында күпләп килә башлай. Ҡазан татарҙары тигәндә, бында Иҙел—Урал регионынан сыҡҡан бөтә татарҙар күҙ уңында тотола. Хәҙерге Башҡортостан, Татарстан төбәктәренән тыш, мәҫәлән, хәҙерге Рязань өлкәһенә ҡараған Касимово, Сасово ҡалаларынан, тирә-яҡтағы татар ауылдарынан халыҡ күпләп күсенә. Башҡорттар ҙа күп килә. Симферополдә ҙур ”Ҡазан биҫтәһе” ҡалҡып сыға. Унда төрки донъяһында киң билдәле шәхестәр ҙә күп йәшәй. Мәҫәлән, күренекле сәйәсмән Сәхибгәрәй Сәйетғәлиев, яҙыусылар Рәим Тинчуров, Рәим Муллин, актриса Сара Байкина. Тиҙ арала татарҙар һәм башҡорттар Ҡырымда ҙур абруй яулап өлгөрә, зыялылар араһында Иҙел—Урал төбәге вәкилдәре мөһим урын биләй. 1883—1918 йылдарҙа сыҡҡан ”Тәржемән” гәзите Ҡырым халҡын туплауҙа ифрат ҙур роль уйнай. Исмәғил Гаспралы (Гасприн-

ский) етәкләгән был баҫма Ҡырымда, Ҡазанда, Өфөлә, Ырымбурҙа, Әстерханда таратыла, тиражы буйынса ул Рәсәйҙәге иң ҙур баҫмаға әйләнә.

Ҡырым мосолмандары йылдам мәҙәни үҫеш юлына баҫа. Бахчисарайҙа бөтә төрки донъяһына билдәле театр эшләй, ундағы ”Зинджирлы” мәҙрәсәһе йәҙҙитселек ысулдарын тәүгеләрҙән булып ҡуллана башлай, консерватив ҡәҙимселек концепцияһына ҡаршы көрәш тә нәҡ Ҡырымда башлана.

Октябрь революцияһынан һуң Ҡырым ғәмәлдә изоляцияла ҡала, Иҙел—Урал регионы менән бәйләнештәр өҙөлә. 1944 йылдың йәйендә ҡырым татарҙары менән бергә башҡорттар һәм Иҙел—Урал төбәктәренән килеп төпләнгән татарҙар ҙа депортациялана. Был мәлдә ҡазан татарҙары 6 мең, ә башҡорттар 500 самаһы кеше тәшкил итә. Ҡырымдан гректар, болгарҙар һәм немецтар ҙа депортациялана. Себер лагерҙарында байтаҡ халыҡ һәләк була. 1953 йылда Сталин үлгәндән һуң да Ҡырымға ҡайтырға рөхсәт ителмәй. Башҡорттар һәм татарҙар нигеҙҙә Урта Азияла, Ҡаҙағстанда төпләнә. Заманында улар Ҡазанға һәм Өфөгә мөрәжәғәт итеп, тарихи тыуған илдәренә ҡайтырға теләк белдерә. Быға юл ҡуйылмай, халыҡ төрлө яҡҡа тарала. Төп өлөшө 2001 йылдан һуң Ҡырымға ҡайта башлай. Лидерҙары Ҡырым Республикаһын тергеҙеү эшенә ҙур көс һала.

Ҡырым Республикаһы татарҙары һәм башҡорттары федерацияһы рәйесе Марат Мозаһит улы Мәсәлимовтың, уның ғаиләһенең яҙмышы ла башҡаларҙыҡынан айырылмай. Ул Үзбәкстандың Китаб ҡалаһында тыуып үҫкән. Федерация эшмәкәрлегенең төп маҡсаты — Ҡырымда татарҙарҙың һәм башҡорттарҙың милли-мәҙәни автономияһын төҙөү. Ҡырым татарҙары, немецтар, болгарҙар, гректар менән бер рәттән депортацияланған халыҡтар статусы алыу ҙа бик мөһим — ул саҡта дәүләт программалары буйынса тейешле финанслау, льготалар талап итергә мөмкин. Мәҫәлән, ул статусҡа ярашлы, ғаиләләр үҙҙәренең элекке йорттарын, фатирҙарын, ерҙәрен ҡайтарып алыу хоҡуғына эйә. 1944 йылға тиклем Ҡырымдағы ҡәрҙәштәребеҙ бик хәлле, ярайһы уҡ мул тормошта йәшәй. Ҡалала ла, ауылда ла йорттарын күберәк таштан, ҙур итеп һала. Бер генә миҫал. Оло йәштәге Моратова Жәүиҙә Исмәғил ҡыҙы 2001 йылда ғаиләһе менән Үзбәкстандан китергә мәжбүр була, шул ваҡыттан алып уларҙың үҙ мөйөшө юҡ. Севастополдәге ҙур кирбес йорттарын кире ҡайтарып алыу мөмкин түгел. Йортто Жәүиҙәнең олатаһы һала. Атаһы караптар төҙөү заводында эшләй, ағаһы Ильяс Ҡара диңгеҙ флотында хеҙмәт итә. Моратовтар нәҫелендәге бөтә ирҙәр һуғыш ваҡытында Севастополде обороналауҙа ҡатнаша, күптәре һәләк була. Немецтар килгәс, халыҡты емерелгән ҡалалағы юлдарҙы тергеҙеү эшенә сығаралар. Жәүиҙәнең оло йәштәге өләсәһе Фатима әбей носилка менән кирбес ватыҡтары ташығанда абынып йығылғас, немец һалдаты уны атып үлтерә.

Совет армияһы килгәс, депортация башлана. Хатта фронттағыларҙы ла Себергә оҙаталар. Жәүиҙәнең ағаһы һуғышта һәләк була, ә атаһы лагерға, шахтаға оҙатыла. Жәүиҙә лә 10 йыл шахтала эшләй. Һуңынан уларға Үзбәкстанға күсергә рөхсәт итәләр. Ҡырымдан депортациялан-

ған таныш гректар, болгарҙар, әрмәндәр, немецтар ҙа Үзбәкстанға күсерелә. Быны республикалағы демографик хәлде үҙгәртеү, төп милләт — үзбәктәр нисбәтен кәметеү өсөн эшләйҙәр. СССР тарҡала башлағас, унда сит милләт вәкилдәренә мөнәсәбәт ҡырҡа үҙгәрә. Депортацияланған халыҡ йорттарын, фатирҙарын ташлап китергә мәжбүр була, уларға компенсация ла түләнмәй. Бушаған торлаҡты власть органдары үҙенә ала һәм, үзбәк ғаиләләренә һатып, аҡса эшләй.

Ҡырымдан депортацияланған халыҡ сит ерҙә лә берҙәм булып, бербереһен яҡлап йәшәй. Башҡорт һәм татар ғаиләләре лә, бөтә ауырлыҡты ҡырым татарҙары менән бергә кисерҙек, үҙебеҙҙең Ҡырымға ҡайтабыҙ, тип хәл итә. Бөгөнгө көндә улар өсөн иң ҙур проблема — торлаҡ. Кешеләр, ҡағиҙә булараҡ, ер алып, шәхси йорттар һала. Ҡырымда ағас йорттар юҡ, фәҡәт кирбестән төҙөйҙәр. Йәш ир-ат үҙенә торлаҡ төҙөгәс кенә ғаилә ҡора ала, шунһыҙ уға бер ҡыҙ ҙа кейәүгә сыҡмай. Йә аҡса эшләп, ҡалала фатир һатып алырға тейеш. Нисек кенә ауыр булмаһын, тормош яйлап көйләнә. Халыҡ тырыш, эшсән. Башҡортостандағы йәки Татарстандағы хәлдәрҙән айырмалы, эскелек бөтөнләй юҡ. Ғаилә ҡормай йөрөү ҙур хурлыҡ иҫәпләнә.

Башҡорттар һәм татарҙар Ҡырымдың мәҙәни тормошон тергеҙеүҙә мөһим роль уйнай. Йыл һайын 21 март көнө Науруз байрамы үткәрелеп, унда башҡорт һәм татар көйҙәре башҡарыла. Уларҙы пропагандалауҙа популяр йырсы Әминә Мостафаева ҙур әүҙемлек күрһәтә. Науруздан ҡала икенсе ҙур байрам — Ураҡтуй, уны уңыш йыйыу тамамланғас үткәрәләр. Беҙҙәге һымаҡ, Һабантуй ҙа традицияға инеп бара. Ҡырым татарҙары иһә һабантуйҙы бик иртә, ырҙынға төшөр алдынан уҡ байрам итәләр. Был сараларҙа йәштәр ҙә әүҙем ҡатнаша. Күренекле йырсы Алһыу Сафина — Ҡырым йәштәренең йыш ҡунағы. Кача ҡаласығы ситендә, диңгеҙ буйында Сафиндар ғаиләһе ҙур ер участкаһы алып, ике коттедж һалған, Качала мәсет төҙөткән.

”Йәшлек” берлеге тирәһендә тупланған йәштәр эшҡыуарлыҡта ла ҙур әүҙемлек күрһәтә. Ҡырымда ижтимағи ойошмаларҙы финанслаусы юҡ, улар аҡсаны үҙҙәре эшләй. Нигеҙҙә, ”Татарстан—Башҡортостан” сауҙа йорто аша. Бөгөнгө көндә иң мөһиме — бизнес-партнерҙар табыу. Уҙған йыл Ҡырым Республикаһында Башҡортостандың Сауҙа вәкиле вазифаһы булдырылып, уға Марат Мәсәлимов тәғәйенләнгәс, был йүнәлештә лә эш башланды. Әммә, Марат Мозаһит улы раҫлауынса, Өфө менән, бындағы бюрократик структуралар менән эш итеүе бик ауыр. Мәҫәлән, Ҡырымда ”Башкирнефтепродукт” компанияһы АЗС-тары селтәрен асыу эше барып сыҡмағас, Ҡазанға мөрәжәғәт итәләр һәм тиҙ арала Татарстан компанияһының бензоколонкалар селтәре ҡалҡып сыға. Ҡазан юғары уҡыу йорттарында Ҡырым йәштәрен уҡытыу, Татарстанда Ҡырым Республикаһы мәҙәниәте көндәре үткәреү тураһында ла килешеү төҙөлгән. Ҡазанда Ҡырым тарихына арналған әҫәрҙәр, Исмәғил Гаспралы тураһында китап нәшер ителәсәк. Өфө лә ошо йүнәлештә әүҙемлекте арттырырға тейеш, сөнки Ҡырымда башҡорттар ҙа бар. Йәғни, беҙҙең Өфөнән ҡарап әйткәндә, Ҡырымда ла башҡорт әүәлдән йәшәй икән.